“Бәлиғ булмаған уҡыусылар араһында тәртип боҙоуҙарҙы иҫкәртеү буынса профилактик саралар” темаһына дөйөм ата-әсәләр йыйылышы

17 ноябрь көнө беҙҙең мәктәптә Баймак районы һәм ҡалаһы прокуроры Кәримов А.Н., КДН вәкилдәре Йәнбирҙин И.И.,Йосопова Л.Р., педагог-психолог Хажина Н.М. ҡатнашлығында “Бәлиғ булмаған уҡыусылар араһында тәртип боҙоуҙарҙы иҫкәртеү буынса профилактик саралар” темаһына дөйөм ата-әсәләр йыйылышы үтте. Саҡырылған вәкилдәр УК төрлө статьялары, тәртип боҙоусыларға штрафтар, райондың ауыр ғаиләләре тураһында статистик мәғлүмәттәр менән ентекле, фәһемле сығыш яһаны. Шулай уҡ тәрбиәүи эш буынса директор урынбаҫары Сәйетова З.С. I сиректең йомғаҡтары менән таныштырҙы . Башланғыс кластар уҡытыусыһы Мәхмүтова З.М. “Ғүмер ике килмәй бит, йәшәгеҙ һеҙ, балалар!” исемле доклад менән төрлө суицидаль күренештәр тураһындағы мәғлүмәт менән ата-әсәләрҙе таныштырҙы. Төрлө профилактика сараларын йәмәғәт ойошмалары менән берлектә планлы  эш алып барыу буйынса ҡарар сығарылды.